Ғилем һәм ғәмәл

# ИСЛАМДЫҢ ҮҘ-ҮҘЕНӘ ҠУЛ ҺАЛЫУҒА ХӨКӨМӨ ПРОБЛЕМАҒА ҠАРАШ ҺӘМ ДАУАЛАУ

***Тормош - Аллаһы Тәғәләнән бирелгән бүләк, ләкин ул кеше биргән бүләктән айырыла, кеше бүләге менән сағыштырмағыҙ. Һәр һынау артында - оло әжер йәшеренгән***

***Бисмилләһи-Рахмани-Рахим!***

Хөрмәтле, туғандар! Әҙәм балаларының үҙҙәренә ҡул һалыуы, йәғни суицид тураһында хәбәрҙәр юҡ-юҡта ишетелеп ҡала. Кеше үҙенә Аллаһы Тәғәләнән бөйөк мәрхәмәт итеп бирелгән ғүмерен ҡыя. Донъяла 40 секунд һайын бер кеше үҙ йәнен ала икән. Ә йылына 1 миллион тирәһе килеп сыға. Үҙенә ҡул һалыусы 15-19 йәшлек үсмерҙәр буйынса Рәсәй Европала - беренсе, ә донъяла бишенсе урынды биләй. Бөтөн йәш төркөмдәрен иҫәпкә алған саҡта ла Рәсәй шулай уҡ алдынғылыҡты бирмәй. Тимәк, был хәл берәүҙе лә битараф ҡалдырырға тейеш түгел.

Әҙәм балаһын нимә шундай аҡылһыҙ аҙымға этәрә, нимә ундағы үҙ-үҙен һаҡлау инстинктын һүндерә? Ғүмер менән хаҡ түләүгә барып етерлек, хисаплашырлыҡ ниндәй ҡайғы булыу мөмкин? Ниндәй ҡаза уны үлем аша ҡотолоу эҙләргә саҡыра? Әҙәм ошо юл менән нимәнән ҡасам, тип уйлай һәм нимәгә өмөт итә һуң?

Был яҙмала беҙ Исламдың суицидҡа мөнәсәбәте, һәләкәтле аҙымға барыу сәбәптәре һәм был фажиғәгә тарымау юлдары тураһында һүҙ алып барырбыҙ.

Иң оло дөрөҫлөк шунда, бөтөн кешеләр ҙә Аллаһ ҡаршыһында тиң, барыһы ла Хаҡ Тәғәләнең донъяны яралтыу ҡанундарына буйһона. Ә донъяның ҡанундары бөтәһе өсөн дә бер иш, берәүгә лә өҫтөнлөк юҡ һәм бөтөн мәхлүктәр, үҙ ихтыяры менән дә, ихтыярҙарынан тыш та, йәшәйеш ҡанундарына буйһонорға мәжбүрҙәр. Уның менән бергә Аллаһ икенсе ҡанундарҙы - Илаһи Асыш ҡанундарын индергән һәм уны үтәүҙе, уға буйһоноуҙы бурыс итеп ҡуя. Тап ошо талап мосолманды кафырҙан, иман әйәһен гонаһлынан айыра ла инде. Аллаһ ҡушҡанды инкар итеүселәр һәләк буласаҡ, ҡундәм һәм тәҡүәле әҙәмдәр ҡотоласаҡ һәм уңышҡа ирешәсәк. Пәйғәмбәрҙәр аша Аллаһтың изге Китаптары индерелгән, ундағы Ҡанундарҙы үтәп кенә, кеше үҙенең тормошон камиллаштыра, эш-ғәмәлдәрен йәшәйештең тәбиғи ҡанундары менән яраҡлаштыра ала. Тик ошо юлдан барыусы кеше генә фанилыҡта матур ғүмер кисерәсәк һәм Ахирәттә сикһеҙ бәхеткә өлгәшәсәк.

Ҡөрьән Әмерҙәренә буйһонмай, кире эш алып барыусылар, гармониянан мәхрүм ҡаласаҡтар, шул арҡала юлдан яҙасаҡтар, аҙашып, үҙҙәрен ике донъяла бәхетһеҙлеккә дусар итәсәктәр.

Иң элек шуны иҫтә тоторға кәрәк, Аллаһ фани донъяны кешегә һынау итеп биргән. Был донъяла һәр саҡ еңеллек, хөрлөк көтөү дөрөҫ түгел. Һынау - тормоштоң асылы, тап ошо ауырлыҡтарҙы еңеү кешенең бурысы булып тора. Тырышлыҡ, көс түгеп, кеше үҙенең йөрәген, эшен, ынтылышын асып күрһәтергә тейеш. Сөнки уларҙың барыһы ла һуңынан, кешегә сауап булып, йәки киреһенсә, уға зарар яһап, таныҡлыҡ бирәсәктәр.

Тормошта үҙ тәғәйенләнешен һәм урынын аңламағандар суицид ҡорбанына әүерелә лә инде. Байтаҡ кешеләр был донъя камил булмаған өсөн генә ғүмерҙәренән яҙырға әҙерҙәр. Улар: "Аллаһы Тәғәлә донъяны камил итеп ярата алманымы ни, ни өсөн донъя шул тиклем ҡыйынлыҡ менән тулы, ниңә үлтереш, иҙеү бара, ни өсөн тыныслыҡ һәм һиллек табып булмай? Донъя камил булмағас, Хоҙай ҙа юҡтыр", тиҙәр. Һорауҙарға яуап биргәндә, шуны әйтергә кәрәк: был кешеләр фани донъяның тәғәйенләнешен бөтөнләй аңламайҙар, улар Аллаһтан идеаль, ләззәтлек талап итәләр, ләкин бит бының өсөн Аллаһы Тәғәлә Йәннәтте бар иткән! Ә фани донъя бурысы - һынау. Аллаһ Ҡөрьән-Кәримдә был турала асыҡ әйтә:

"Бөтөн хөкөмдарлыҡты хозурында тотоусы Аллаһ олуғтарҙың бөйөгөләр һәм Аллаһтың көсө бөтөн нәмәгә етә. Аллаһ кемдең изгелек ҡыласағын һынап ҡарар өсөн, үлемде һәм тормошто бар итте. Аллаһ - еңелеү белмәҫ Ҡөҙрәт Эйәһе, сикһеҙ Мәрхәмәтле, Ярлыҡаусы" *(Ҡөрьән, 67: 1-2)*.

Әлеге аяттарҙан шул аңлашыла, фани донъя, имтихан булараҡ, - камил һәм идеал. Йәннәткә лайыҡ кеше был имтиханды мотлаҡ яҡшы бирәсәк, ә бирә алмаған кеше төпһөҙ Йәһәннәмгә олағасаҡ. Был һынауҙы берәү ҙә урап үтә алмай, алдап та, ҡасып та ҡотолоп булмай, ул һәр кешене ентекле тикшерә, һынай. Һәм һәр кешегә һынау бирелә, кешенең тоғролоҡ кимәлен асыҡлау маҡсатында хатта Аллаһы Тәғәлә айырым ҡанундар һәм сикләүҙәр индергән. Шул уҡ ваҡытта Аллаһы Тәғәлә берәүгә лә күтәрә алмаҫтай йөктө лә йөкләтмәй. Был донъяла бөтә нәмә лә үҙгәреүсән, шатлыҡ хәсрәт менән алмашына, бәхеттән һуң юғалтыу ҡайғыһы килә, көйөнөстәр менән һөйөнөстәр сиратлаша, ләкин иманлы әҙәмдә фанилыҡта Аллаһы Тәғәләгә фәҡәт тоғролоҡ ҡына борсорға тейеш. Сөнки тоғролоҡ, тәҡүәлек - был донъяла йәшәүҙең төп маҡсаты.



### СУИЦИДҠА ИЛТКӘН ЮЛДАР

1. Йәшәү мәғәнәһен юғалтыу

Был үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙың төп сәбәбе. Ә ҡалған сәбәптәр - тормоштоң мәғәнәһеҙлеген хата аңлау һөҙөмтәһе генә. Тормоштан мәғәнә тапмаған кеше өсөн һәр уңышһыҙлығы үҙенә ҡул һалыу өсөн сәбәп кенә булып тора. Сөнки уның боҙоҡ логикаһы, был мәғәнәһеҙ тормош өсөн һин ни өсөн ыҙа сигергә тейешһең, тип әйтеп тора. Быны шуға ла фани донъяға ни өсөн килеүен, ниндәй роль үтәүен, йәшәү маҡсатын, һәм был маҡсатҡа ирешер өсөн нимә эшләргә тейешлеген аңлау ғына кешегә тыныслыҡ һәм рухи хушланыу бирә. Ысынлап та, нимәлә һуң ул йәшәү мәғәнәһе?

Ҡайһы бер насранизар Ғайсаны (с.ғ.) үҙҙәренең "йәшәү мәғәнәһе", тип таный. Ләкин күпселек өсөн был һүҙҙәр аңлайышһыҙ, сөнки унан дөйөм һығымта яһауы бик ауыр: әлеге "мәғәнәһе" яҡлар, хуплар, раҫлар һәм ғүмерҙе дауам итеү теләген һаҡлар өсөн нимә эшләргә кәрәк?

Насранизар илаһилаштырыуҙы, йәғни кешенең Аллаһ менән ҡушылыуын, үҙҙәренең "йәшәү мәғәнәһе", тип атай (Ҡара.: "Обожение как смысл человеческой жизни", Архимандрит Георгий). Был шулай уҡ изге аталар формулаһында ла сағыла: "Аллаһ кешегә әйләнде, кеше Аллаһ булһын өсөн". Бындай нәмәне әйтер өсөн кешенең үҙ йөрәгендәге тәкәбберлек, һауаланыу ишеген шул тиклем киң итеп асып ҡуя алыуына иҫ китеп аптырарға ғына ҡала.

Буддизмда, йәшәүҙең мәғәнәһе һәм юғары маҡсаты - ғазапланыуҙы туҡтатыуҙа, тип әйтелә. Аңлатып булмаған бер халәткә - нирванаға - инеп кенә ғазапланыуҙы туҡтатып була, тип аңлата был дин. Ләкин ул да булмай торған хәл, сөнки буддистар үҙҙәре лә тулыһынса ғазаптан азат түгелдәр. Ә нирванаға инеүселәрҙең һаны (үҙҙәре әйтеүенсә) бик-бик аҙ. Улар тураһында хатта легендалар уйлап сығаралар. Ерҙә йәшәүселәр бит бик күп, улар нирвана тураһында телгә лә алмайҙар. Ә инде быны-быны үҙенең ғүмерен ҡыйырға торған әҙәмгә кәрәкме бындай хыялың? Нирванаға китеүселәр тураһындағы әкиәт уны нисек йыуатһын да инде?

Совет дәүерендә конфуцианлыҡ нык ҡына таралғайны. Конфуций буйынса, кешенең төп маҡсаты - "Күк аҫтындағы империя" тип аталған идеал, камил йәмғиәт төҙөү. Ҡалған бөтә нәмә тик шул маҡсатҡа ғына буйһондоролорға тейеш. Йәмғиәт мәнфәғәте кешенекенән өҫтөн тора. Кеше иһә дөйөм механизмдың - бәләкәй бер күҙәнәге. ХХ быуат аҙағында беҙ шундай "күк аҫтындағы империяның" тарҡалыуын күрҙек, уның менән ҡуша миллионлаған кешенең йәшәү мәғәнәһе, хыялы, яҙмышы селпәрәмә килде.

Мәжүсилек диндәрендә ғаилә, тоҡом-затты һаҡлау культы көслө. Йәшәү мәғәнәһен улар шунда күрә. Ә кешенең ғаиләһе булмаһа? Тимәк, суицид янағанда ғаилә дәлил була алмай. Үҙҙәрен илаһилаштырырға тырышыу арҡаһында, насранизар үҙҙәренең "насрани донъяһында" позицияларын юғалта бара, диндәре менән бәйләнештәре бушаклана-бушаклана. Көнбайышта хәҙер иң дөрөҫ кеше - ғаилә ҡиммәттәренә иғтибар биргән кеше, сөнки ғаилә - йәмғиәтте берләштереп тороусы һуңғы сылбыр. Шулай итеп, көнбайышта насранилыҡ та хәҙер тоҡом - зат культы, неомәжүсилек менән алмашына бара һәм ул, әлбиттә, суицидҡа ҡаршы тором көслө дәлил түгел. Киреһенсә, ғаиләләге аңлашылмаусанлыҡтар, ығы-зығы йәшәү мәғәнәһен юғалтыуға, кешенең үҙенә ҡул һалыуына алып килә.

Был иңләп-буйлап сыҡмаҫ донъяла нимә йәшәүҙең төп мәғәнәһен тәшкил итә? Йәғни Аллаһы Тәғәлә бар иткән һәм бүтән илаһтар булмаған донъяла. Бөтәһе лә тик Бер Аллаға - Ғаләмдәр Раббыһына ғибәҙәт ҡыла: тереһе лә, тере булмағаны ла, ҙуры ла, бәләкәйе лә, көслөһө лә, зәғифе лә, Галактикалар, йондоҙҙар, Ай, Ҡояш, фәрештәләр, тәбиғәт, йәнлек, ҡошҡорт, таш, һыу, ут, ағастар, күк һәм ер Уға ғына ғибәҙәт итә, Уны ғына данлай. Һәм бына ошо оло донъяла кеше ниндәй айырым мөнәсәбәткә дәғүә итә һуң? Уның дәғүәһе нимәгә нигеҙләнә? Сикһеҙ мәрхәмәт эйәһе Аллаһы Тәғәлә беҙҙе йәшәү мәғәнәһе тураһындағы уйҙар менән ғазапламай. Ул шулай ти:

"Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе бары тик Миңә ғибәҙәт итһендәр өсөн яралттым" *(Ҡөрьән 51:56)*.

Икенсе аятта шулай тиелә:

"Раббығыҙ шулай бойорҙо: "Миңә доға уҡығыҙ, ҡабул итәсәкмен. Шул хаҡ, Миңә ғибәҙәтлек итеүҙән баш тартҡан тәкәбберҙәр, хурлыҡҡа ҡалдырылып, Йәһәннәмгә бырағтырыласаҡтар" *(Ҡөрьән 40:60)*.

Эйе, кеше тап Раббыһына ғибәҙәт итер өсөн ерҙә йәшәй, уға ғүмер шуның өсөн бирелгән. Ғибәҙәт итеү кешенең айырым бер сифаты түгел, был һәр мәхлүктең тәбиғи асылы.

"Ете ҡат күктәге һәр ер өҫтөндәгеләр, барыһы ла Аллаһты данлай. Уны данламаған бер нәмә лә, бер кем дә юҡ, ләкин һеҙ уларҙың данлау һүҙҙәрен аңламайһығыҙ. Шул хаҡ, Ул сабыр, ғәфү итеүсе" *(Ҡөрьән, 17:44)*.

Кеше - Раббының иң ғәжәйеп яратылмыштарының береһе, шуға ҡарамаҫтан, ул Аллаһтың ҡоло. Бүтән мәхлүктәрҙән айырмалы рәүештә, ул Раббының әмерҙәренә ҡарыша ала. Ҡайһы юлды һайларға - тоғро ҡол булып Йәннәткә инергәме, йәки ҡаршылашыусы ҡол булып, Йәһәннәмгә атылырғамы - уға ирек бирелгән.

Күп кенә кешеләргә шайтан тәкәбберлекте, маһайыуҙы вәсвәсә итә. Шайтандың ҡупыртыуы уны ғорур итә. Уның ҡапҡанына эләккәндәр, ғәҙәттә, шулай тиергә ярата: "мин үҙемә үҙем Алла", "Мин берәүҙең дә ҡоло түгел", "Мин ирекле кеше", "Был ҡолдар дине", Аллаһҡа буйһонмаған кеше фанилыҡтағы төп бурысынан да ситләшә. Бер заман килеп, ул үҙенең был донъяға кәрәкмәгәнлеген төшенә башлай, ниндәйҙер бурысын ҡайтара алмағанын тойоп, тыныслығынан яҙа.

Кеше көнө-төнө Аллаһҡа ғибәҙәт итеүсе фәрештәнән өҫтөн түгел, шулай булғас, ғорур ҡыланырға, ғибәҙәт итеүҙән баш тартырға хаҡы юҡ. Аллаһ шулай ти:

"Шул хаҡ, Раббың янындағылар (фәрештәләр) Уға ғибәҙәт итеүҙән (тәкәбберләнмәйҙәр) баш тартмайҙар, уны ололайҙар һәм бары тик Уға ғына сәждә итәләр" **(Ҡөрьән, 7:206)**.

Аллаһҡа ғибәҙәт итеүҙән баш тартыу - Уның бөйөк, хикмәтле Әмерҙәренән баш тартыу, ә Әмерҙәрҙән баш тартыу тормош йүнәлешен юғалтыуға, ысын ҡиммәттәрҙе емереүгә, яҡшылыҡ менән яуызлыҡҡа ҡарата ҡараштың үҙгәреүенә килтерә. Шайтан менән бергә тороп ҡалған кеше уға бер нисек тә ҡаршы тора алмаясаҡ, уның шайтан менән көрәшерлек ҡоралы ла, үҙен яҡларлыҡ дәлилдәре лә юҡ. Уға хәҙер дәлилдәрҙе шайтан бирә, ләкин яҡшылыҡ өсөн түгел, ә зыян яһар өсөн. Аллаһтың әмерҙәрен үҙенең мәкере һәм төшөнсәләре менән алмаштырып, шайтан кешене зарарлай, уны һаҙлыҡҡа этәрә, уның эске аһәңлеген (гармонияһын) юҡ итә, һөҙөмтәлә нерв системаһын, психикаһын боҙа, ахыр, кешегә ике яуызлыҡтың бәләкәсерәге үлем булып тойола башлай.

**(Дауамы бар).**